Башкирский язык и литература в условиях глобализации
и полиэтнической среды: опыт и перспективы

ISBN 978-5-91608-181-7 С.428-431

https://doi.org/10.31833/conf_ihll2019.080

УДК 398

**Г. В. Юлдыбаева**

*Ордена Знак Почета Институт истории, языка и литературы УФИЦ РАН*
*проспект Октября, 71, Уфа, 450054, Россия*
*E-mail: nargul1976@list.ru*

# БАШҠОРТТАРҘА ЮРАУҘАР ҺӘМ ЫРЫМДАР: ЭКСПЕДИЦИЯ МАТЕРИАЛДАРЫ БУЙЫНСА

В статье на материале фольклорных экспедиций рассматриваются такие малые жанры, как приметы, предсказания, заговоры и т.п. В статье представлены материалы академических экспедиций зафиксированные автором с 2013 по 2019 г. в Республике Башкортостан (Стерлибашевский, Куюргазинский районы) и Пермском крае РФ.

*Ключевые слова:* устно-поэтическое творчество, башкирский фольклор, духовное наследие, приметы, предсказания, информант, экспедиция.

Бөгөнгө көнгә тиклем Почет Билдәһе орденлы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты фольклорсылары тарафынан уҙғарыла килгән ғилми экспедициялар осоронда төрлө ҡиммәтле һәм ҡыҙыҡлы башҡа төр жанрҙар менән бер рәттән үҙенсәлекле ғөрөф-ғәҙәт, ырымдарға, юрауҙарға, ышаныуҙарға юлығырға мөмкин. Бындай уңышҡа, әлбиттә, оло быуын вәкилдәренең күңел һандығын ҡуҙғата белгәндә генә өлгәшәһең. Кеше борон-борондан үҙ тормошон бары тик бәхетле итергә, муллыҡта, байлыҡта йәшәргә тырышҡан. Уның шулай булыу-булмауын көн элгәре белер өсөн, ата-бабаларының, шәхсән үҙенең бай тормош тәжрибәһенә, белемгә, көстәргә (мәжүси эйәләргә) таянып, төрлө юрауҙар, ырымдар уйлап тапҡан. Халыҡта борон-борондан күрәҙәлек ҡылыусы, фал асыусы, ноҡот һалыусы, юраусы кешеләрҙең булыуы ла билдәле. Был хаҡта әле күренекле башҡорт ғалимы Абдулҡадир Инан “боронғо төркиҙәр телендә “ирк” һүҙе менән йөрөтөлөп, “ырыу”, “тамыр”, “ҡәбилә” төшөнсәләренә эйә булып торған”, тип билдәләп, Мәхмүт Ҡашғариҙың да фал асыу кәлимәһен шулай уҡ тамыр, ҡәбилә мәғәнәләре менән бер ыңғайҙа ҡулланылыуы тураһында әйтеп үтеүе мәғлүм. Һәм ғалим, башҡа төрки халыҡтар ижадына мөрәжәғәт итеп, “фалсылыҡ”, “күрәҙәселек” тураһындағы күҙәтеүҙәрен фәнни яҡтан нигеҙләп, ҡыҙыҡлы һығымталар яһағайны [Инан, 1998, 141]. Боронғо мәжүсилек дәүерендә ышаныуҙар нигеҙендә барлыҡҡа килгән был ижад төрө һуңыраҡ ислам дине йоғонтоһонда шаҡтай үҙгәрә, ҡайһылары бөтөнләй тыйыла, ә ҡайһы берҙәре ислам диненә яраҡлаштырыла. Шуға күрә бындай материалдарҙың күп өлөшө тулы килеш һаҡланмаған. Экспедициялар ваҡытында беҙгә фал, Ҡөрьән асыусылар, күрәҙәселәр тураһында бары тик наҡыҫ ҡына мәғлүмәттәр менән эш итергә тура килә. Ҡайһы бер төбәктәрҙә бай мәғлүмәтле кешеләр менән осрашыу бәхете тейә. Уларға был һәләт йә быуындан-быуынға күсә килгән,

олатай-өләсәйҙәре өйрәтеп ҡалдырған, йәки ниндәйҙер мөғжизәүи хәлдәр арҡаһында яралған. Әлбиттә, бындай кешеләр ситтән килгән юлаусыға тиҙ генә асылып бармайҙар, әйтеүҙәренсә, ул турала асыҡтан-асыҡ һөйләү тыйыла. Сөнки был һәләттең юғалыуы бар, тип ышаналар йәки белгәндәрен яҡын күргән, артабан был белемде дауам итә алырлыҡ кешегә генә тапшырыуҙарын әйтәләр.

Шундай һәләтле кешеләрҙең береһе 2019 йылда Көйөргәҙе районы Түкән ауылындағы экспедиция осоронда танышҡан Юлтаева Миниса Миңлеәхмәт ҡыҙы (1938 й.) ине. Ул олатаһының фал асыуын, уға тирә-яҡтан кешеләрҙең күп кешеләр килеүен бәйән иткәйне. “Олатайымдың йондоҙнамәһе, фалы бар ине. Килгән кешеләргә ул юғалған нәмәләрен табырға ярҙам итер, һаулыҡ яғынан ауырыуҙарын да, ҡасан, нисек был донъянан китәсәктәрен дә әйтә ине. Әйткәндәре тура килә торғайны. Доғалар уҡып, өшкөрә лә торғайны. Дини китаптары ла күп ине. Үлер алдынан ул китаптарҙы кешегә өләште, йондоҙнамәһен, ҡайһы бер китаптарын үҙе менән баҡыйлыҡҡа алды, фалын әсәйемә ҡалдырған ине лә, юғалттыҡ”, – тип хәтерләне ул. Шулай уҡ, 2017 йылда Ҡөрьән асыусы Стәрлебаш районы Түбәнге Аллағыуат ауылында Мәүлетҡолова Рәйлә Фәйзулла ҡыҙы (1960 й.) менән осрашырға тура килде [Экспедиция, 2018, 8]. Беҙгә уның тиҫбе менән көрәшәлек ҡылыу һәләтен, шулай уҡ доғалар яҙылған “үткәрмә” аша үткәреү ысулын да күрергә насип булды.

2013, 2019 йылдарҙа иһә Пермь башҡорттарында халыҡ ижадының көтөлмәгән һәм хәҙерге көндә һирәк осрай торған төрҙәрен һаҡлаусыларға тап булдыҡ. Уларҙан үҙенсәлекле мәғлүмәттәр, юрауҙар яҙып алынды. Юрауҙар, ололар һөйләүенсә, бигерәк тә һуғыш осоронда киң таралыш алған. Ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәре, улдары, яҡын туғандарының яу ҡырында иҫән-һау икәнлеген, уларҙың ҡасан әйләнеп ҡайтыуын белеү маҡсатында төрлөсә юрап ҡарағандар. Мәҫәлән, был төбәктә 6 апрель көнө “тын тыңлаған” кис икән. Был төндө кисен сит кешенең тәҙрә төбөнә барып, тыштан уларҙың нимә һөйләшкәнен тыңлайҙар. Өй эсенән яҡшы хәбәр ишетелһә — яҡшыға, яман хәбәр ишетелһә — яманға юрайҙар.

Әгәр ҙә инде өйҙәге “тын хужаһы” тыштағы килеүсене белеп-һиҙеп ҡалып, ҡапыл ҡаҙан ҡырһа, таба һуҡһа йәиһә көслө тауыш сығарһа, тыңлаусы кеше ҡолаҡай йәки һаңғырау булып ҡалыр, тигәндәр.

Борон яратышып йөрөгән егет менән ҡыҙ, әгәр оҙаҡ ваҡытҡа айырылышып торорға тура килһә, урманға барып, йәнәш кенә үҫкән йәш кенә ике сауҡаны ишеп китер булған. Ишелгән сауҡа тағатылмай үҫеп китһә, ҡауышыуға, тип юрағандар [БХИ, 1995, 139]. Яуға киткән ир-егеттәр һөйгәндәре менән элек шул ырымды эшләгән, ҡыҙҙар шул ағастар янына барып күҙәтеп, яратҡандарын көткән.

“Тын тыңлаған” кисте йәш ҡыҙҙар үҙҙәренең киләсәген белеү маҡсатында төрлө юрауҙар башҡарған. Әлбиттә, уларҙың күпселеге үҙенең киләсәктә кейәүгә сығыуына, буласаҡ тормош иптәше хаҡында күҙаллаған. Мәҫәлән, шундай юрауҙарҙың береһе, ҡыҙҙар сит кешенең мал һарайына кереп һарыҡ тотҡандар. Ҡулға йәш һарыҡ бәрәне эләкһә, кейәүгә йәш кешегә, оло һарыҡ тотһа, ҡарт кешегә кейәү сығаһың, тип юрағандар (4). Ҡайһы бер яҡтарҙа, кисен аҙбарға инеп, себеш (тауыҡ) тотҡандар. Себеш тотһа, йәш егеткә, тауыҡ тотһа – ҡарт кешегә кейәүгә сығыр, тигәндәр (5). Һуңынан ҡулға эләккән себеште (тауыҡты) өйгә алып инеп, алдына ем, һыу ҡуялар икән. Әгәр ҙә инде себеш “йырлай-йырлай” һыу эсһә, кейәүең йырсы, шәп кенә ем сүпләһә, күп ашарға яратҡан кешегә, тауышланып һыуҙы күп эсһә инде, күңелсәк кешегә кейәүгә барырһың, тип иҫәпләгәндәр (6). Шулай уҡ, буласаҡ кейәүҙең холҡон да белергә тырышҡандар. Бының өсөн ҡараңғыла утынлыҡтан утын ағасы алғандар, әгәр ҙә ҡулына шыма утын эләкһә, йомшаҡ күңелле, яҡшы кеше менән йәшәрһең, ботаҡлы утын эләкһә инде, кейәүең яман холоҡло булыр, тип күҙаллағандар (3).

Ҡулдарҙы ике яҡҡа һуҙып ситәнде ҡосаҡлайҙар, ҡосаҡҡа күпме ситән һыя, шул ситәндәрҙе «егет», «бабай», «егет», «бабай» һүҙҙәрен әйтеп һанағандар. Һуңғы ситән «егет» һүҙендә туҡтап ҡалһа, кейәүең йәш, әгәр ҙә «бабай» һүҙендә ҡалһа, ҡарт кейәүгә бараһың, тип юрағандар (1).

Был кисте шулай уҡ ҡыҙҙар тағы бер төрлө юрау башҡарған. Мунсаға инеп һөрөмлөктән ҡулдарын сығарып ултырғандар. Йәнәһе, тыштан ниндәй ҡуллы кеше килеп униң ҡулын тотор. Был көндөң "юрау көнө" икәнлеген һәр кем белгәнлектән, әлбиттә, ҡулды килеп тотоусылар ҙа булған. Әгәр ҡыҙҙарҙың ҡулын ҡаты ҡуллы кеше килеп тотһа, кейәүгә ҡарт кешегә сыға, йомшаҡ ҡуллы кеше килеп тотһа, кейәүе йәш булыр, тигәндәр.

Киләсәктә байлыҡта йәиһә ярлылыҡта йәшәүҙе белеү маҡсатында иһә ихатаны уратып тотолған ситәндең таҡталарын «мишәк», «сымылдыҡ», «ҡапсыҡ», тип әйтеп һанағандар. Һуңғы ситән «мишәк» һүҙендә туҡтаһа – бай булырһың, «сымылдыҡ»та – уртаса, "ҡапсыҡ" иһә ярлы тормош итеүҙе аңлатҡан (4). Ҡайһы саҡта, йәштәр бер-береһен шаяртып, мунсаның ишеген тыштан терәтеп тә киткеләгән. "Ул төндә һәр кем күңел аса ине, кемдәрҙер бына шулай юрауҙар менән булыша, кемдер шаяртып бер-береһенә ни нәмәләр эшләп ҡыҙыҡ итәр ине. Йә ат арбаһын икенсе йорт эргәһенә күсереп ҡуя, машинаны этеп алып китеп, ауылдың икенсе осона ултыртып та китеүселәр ҙә бар ине, тип хәтерләй ололар (4).

Тәртешкә (кочерга) менән дә юрағандар борон. Тәртешкәне ишек төбөнән алып ҡапҡаға тиклем әйләндереп «атлатып» бараһың икән. Тәртешкә ҡапҡаны үтеп сығып китһә, йәиһә яртылаш ҡына сыҡһа ла, шул йылды кейәүгә сығаһың, әгәр ҙә ҡапҡа эсендә тороп ҡалһа, ул йылды кейәүгә сыҡмайһың, имеш. Йәиһә киштекте (кейеҙ итек – Г.Ю.) ҡапҡа аша бәрәһең, киштектең башы ҡайһы яҡҡа ҡарап төшә, шул яҡҡа кейәүгә бараһың (4). Борон иһә, сабатаны ҡапҡа аша ла бәргәндәр, сабатаның бауы ҡайһы яҡҡа ҡарап төшә, кейәүең шул яҡтан булыр, тигәндәр (5). 6 апрель төнө ҡыҙҙар өйҙөң йоҙаҡ асҡысын кеҫәләренә һалып йоҡлағандар. Төшөңдә ниндәй егет килеп асҡыс һорай, шуға кейәүгә сығаһың, тип ышанғандар (3).

Йәше етеп өйләнмәгән егеттәр иһә яҙ көнө сыйырсыҡтарға иғтибар иткән. Ҡоштар ишле күренһә – шул йылды өйләнә, ишһеҙ күренһә – өйләнмәй, тигәндәр [БХИ, 1995, 138].

Шулай уҡ, экспедицияларҙа халыҡ теленән йәш ваҡыттағы һөйҙөргөстәр ҙә яҙып алынды. Был һөйҙөргөстәрҙе ғашиҡ булған кешеләр, теләккә ирешеүенә ышанып, артабан мөнәсәбәткә өмөт бағлап әйткән. Ошо үтенес тағы ла нығыраҡ тәьҫирлерәк булһын, төбәлгән "хужаға" барып етһен өсөн, бындай мөрәжәғәткә табыныу, ялбарыу төҫөн биргәндәр. Мәҫәлән, шундай һөйҙөргөстәрҙән бер миҫал: "Аллаһы Тәғәләнән үтенеп һорайым (исемдәр әйтелә) 360 тамыры менән бағланым, 380 быуындары менән бағланым, 140 һөйәктәре менән бағланым, (исемдәр әйтелә) мөхәббәте өсөн. Мәңге-мәңге йәшәһендәр бергә, амин. Йә мөхәббәт, йә Муса, йә мөхәббәт, йә Ғайса, йә мөхәббәт, йә Ибраһим, йә мөхәббәт, йә Мостафа, салиаллаһи ғәләйһи вәссәләм. Айҙар нисек әйләнә, һыуҙар нисек әйләнә, айҙар, һыуҙар, донъялар әйләнгән кеүек (исем әйтелә) менән башы-күҙе менән миңә бәйләнһен. Быуындары, һөйәктәре, тамырҙары, барса ағзалары менән миңә ғашиҡ булһын. Амин!" (2). Ололар әйтеүенсә, һүҙ көсө, һүҙ магияһы үҙ эшен эшләгән, улар бер-береһе менән ҡауышыр булғандар.

Шулай итеп, халыҡ хәтерендә әлеге көндә лә ырымдар, юрауҙар, күрәҙәлек итеү – ноҡот һалыу, фал асыу ғәҙәте йәшәй килә. Быуындан-быуынға күсә килеп, халыҡ хәтерендә һаҡланған был материалдың фән өсөн, әлбиттә, ҡиммәте ҙур. Әйтергә кәрәк, был бик ҡыҙыҡлы өлкә, һәм уларҙы күҙ уңынан ысҡындырмайынса, халҡыбыҙҙың рухи мираҫының бер мөһим өлөшө итеп ҡабул итеп, фәнни яҡтан артабан да өйрәнергә кәрәк.

**Әҙәбиәт**

Башҡорт халыҡ ижады. 1 том. / Материалды һайл., төҙөү., аңлатм. бир., инеш мәҡәлә авторҙары Ә.М. Сөләймәнов, Р.Ә. Солтангәрәева. Өфө: Китап, 1995. 560 б.

Инан А. Шаманизм тарихта һәм бөгөн. Өфө: Китап, 1998. 222 б.

Экспедиция материалдары – 2017: Стәрлебаш районы (материалдар һәм тикшеренеүҙәр) / Төҙөү. Г.В. Юлдыбаева, Ф.Ф. Гайсина, А.М. Хәкимйәнова. Өфө, 2018. 352 б.

## Информанттар

1. Аҙнағолова Ғәҙилә Әхмәтхан ҡыҙы, 1930 йылғы, 2 класс белемле, колхозда эшләгән, Пермь крайы Барда районы Танып ауылы.
2. Батыркаева Әнисә Ғүмәр ҡыҙы, 1928 йылғы, 4 класс белемле, 2 бала әсәһе, колхозда эшләгән, Пермь крайы Барда районы Ҡоҙаш ауылы.
3. Ғабдулханова Зөһрә Зәйнулла ҡыҙы, 1951 йылғы, 10 класс белемле, 3 бала әсәһе, тәрбиәсе, Пермь крайы Барда районы Аҡбаш ауылы.
4. Ғәлиева Сәнифә Ғәфиәтулла ҡыҙы, 1947 йылғы, 4 бала әсәһе, Сөжән ауылынан.
5. Зимасова Мәрйәм Хәнәфи ҡыҙы, 1941 йылғы, 3 бала әсәһе, фельдшер булып эшләгән, Пермь крайы Барда районы Ишем ауылы.
6. Масиева Гүзәл Зәки ҡыҙы, 1953 йылғы, урта махсус белемле, мәҙәниәт йортонда эшләгән, Пермь крайы Барда районы Төндөк ауылы.
7. Юлтаева Миниса Миңлеәхмәт ҡыҙы, 1938 йылғы, 3 бала әсәһе, 5 класс белемле, колхозда эшләгән, Күгәрсен районы Түкән ауылы.

**G. V. Yuldybaeva**

*Order of the Badge of Honour Institute of History,*
*Language and Literature UFRC Russian Academy of Sciences*
*October Avenue, 71, Ufa, 450054, Russia*
*E-mail: nargul1976@list.ru*

## PREDICTIONS AND OMENS OF BASHKIRS: ON EXPEDITIONS MATERIAL

In a scientific article on the material of folklore expeditions, such small genres as signs, predictions, conspiracies, etc. are examined. The paper presents materials of academic expeditions recorded by the author from 2013 to 2019 in the Republic of Bashkortostan (Sterlibashevsky District, Kuyurgazinsky District) and the Perm Territory of the Russian Federation.

Keywords: oral and poetic creativity, Bashkir folklore, spiritual heritage, signs, predictions, informant, expedition.

## References

Bashkir folk art. 1 volume / Compilation, introduction by A.M. Suleymanov, R.A. Sultangareev. Ufa: Kitap, 1995. 560 p.

Inan A. Shamanism in history today. Ufa: Kitap, 1998. 222 p.

Expeditionary materials - 2017: Sterlibashevsky district (materials and research) / Compiled by G.V. Yuldybaeva, F.F. Gaisina, A.M. Khakimyanova. Ufa, 2018.352 p.